# Тема: «Ижадында халыҡ яҙмышы».



Мәшһүр башҡорт яҙыусыһы, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Һәҙиә Дәүләтшина.

*“Һәҙиә Дәүләтшинаның әҫәрҙәрен уҡымай тороп, башҡорт халҡының тормошон аңлап етеү мөмкин түгел”.*

*Л. Соболев.*





**Ырғыҙ ҡыҙы Һәҙиә Дәүләтшина**
**күңелдә мәңге йәшәй**

Һәҙиә Дәүләтшина
студент йылдарында





Һәҙиә Дәүләтшина (һулда) үҙенең әхирәттәре менән.

# СССР-ҙың I яҙыусылар съезында



**1-се рәттә: Николай Тихонов,Алексей Толстой, Максим Горький, Афзал Таһиров.**
**2-се рәттә:Һ. Дәүләтшина, М. Зорин, Д.  Юлтый, Булат Ишемғол, Ғариф Ғүмәр, Ғабдулла Амантай**



Һәҙиә Дәүләтшина Йылайыр совхозында эшселәр араһында. 1931 йыл.

# Яҙыусы туғандары менән



Сибәғәт Лофуллин, әсәһе, Һ. Дәүләтшина, икенсе ире Зәйнулла Сафин.


Аксаков ял йорты, 1951.

# Әҙибә хаҡында ҡәләмдәштәре:



Мин уны юғары рухлы,
яҙыусы йәнле
кеше итеп
белә инем.

Мостай Кәрим.

**Һәҙиә Дәүләтшинаның ижадында, бигерәк тә унын "Ырғыҙ" ында, яҙыусы оло фекер эйәһе, ғалим – тарихсы, этнограф, социолог, психолог, философ булып һәм, иң мөһиме, үҙ халҡының яҙмышы менән йәшәүсе патриот булып күҙ алдына баҫа.**

Әнүәр Вахитов,
яҙыусы, ғалим



**Дәүләтшина Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы**, башҡорт яҙыусыһы. 1905 йылдың 5 мартында Һамар губернаһы Пугачев өйәҙе Имел улусының (хәҙерге Һамар өлкәһе Оло Чернигов районы) Хәсән ауылында тыуа. 1954 йылдың 5 декабрендә Бөрө ҡалаһында ерләнгән. Шәхес культы, тоталитар режим осоронда нахаҡҡа хөкөм ителеп, күп йылдар буйы михнәт һәм ғазап сигеп йәшәргә дусар ителеүгә ҡарамаҫтан, үтә ауыр шарттарҙа ул башҡорт әҙәбиәтендә иң яҡшы ҡаҙаныштарыбыҙҙың береһе тип баһаланырҙай аҫыл әҫәр — «Ырғыҙ» романын тамамлай һәм шуның менән ил алдында оло ихтирам яулай. Һәҙиә Дәүләтшина шәхесе һәм таланты башҡорт донъяһында М. Аҡмулла, Ш. Бабич, М. Буранғол һымаҡ фажиғәле яҙмышҡа дусар ителгән бөйөк әҙиптәр һәм бөйөк шәхестәр менән бер рәттә тора. Һәҙиә Дәүләтшинаның киң билдәле әҫәрҙәре: "Ырғыҙ" (1942-1952 йй.), "Айбикә" (1930), "Башаҡтар тулҡыны" (1932), "Ялҡынлы йылдар", "Һырға һабағы" (1935).

# Тормош юлы

1920 йылдарҙа Һамар губернаһы Дынғыҙбай ауылында уҡытыусы булып эшләй.
1924-1925 йылдарҙа Педагогия институты рабфагында уҡый.
1932 йылда Редакторҙар әҙерләү буйынса Мәскәү институтында белем ала.
1934 йылда 1-се СССР яҙыусыларҙың съезында делегат булып ҡатнаша.
1935 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына уҡырға инеп, уның ике курсын бик яҡшы билдәләр менән тамамлай.
1936 йылда Минск ҡалаһында үткән яҙыусыларҙың 3-сө Пленумында ҡатнаша. Өфө ҡалаһы Ленин район Советына депутат, Советтарҙың ғәҙәттән тыш X Бөтә Башҡортостан съезына делегат итеп һайлана.
1937 йылдың 20 ноябрендә Ватанға хыянат итеүсенең ғаилә ағзаһы булыуында ғәйепләп, ҡулға алалар һәм НКВД Айырым кәңәшмәһе тарафынан 5 йылға иркенән мәхрүм итәләр.
1937-1942 йылдарҙа Мордовия Темников лагерҙарында ултыра.
1954 йылдың 5 декабрендә - Бөрө ҡалаһында үпкә ауырыуынан вафат була.
1967 йылда Һәзиә Дәүләтшинаға "Ырғыз" романы өсөн (үлгәндән һуң)

◆ Һәжиә Лотфулла ҡыҙы Дәүләтшина 1905 йылдың 5 мартында Һамар губернаһы Пугачев өйәҙенә ҡараған Хәсән ауылында тыуған.

◆ Башланғыс белемде үҙҙәренең ауылындағы "ҡыҙҙар мәҙрәсәһе"ндә һәм Совет хөкүмәте асҡан яңы мәктәптә ала. Ун биш йәшендә Диңгеҙбай ауылында уҡытыусы булып эшләй башлай.

◆ Һ. Дәүләтшина 1924 йылда Өфөлә Башҡорт педагогия рабфағында уҡый.

◆ 1927—1932 йылдарҙа Өфөләге Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге балалар йортонда тәрбиәсе-педагог булып эшләй. Артабан ул Баймаҡ районы "Йылайыр" совхозы гәзите редакцияһында әҙәби хеҙмәткәр була.

◆ Һәжиә Дәүләтшина 1934 йылда СССР яҙыусыларының беренсе съезы делегаты була. 1936 йылда Минск ҡалаһында үткәрелгән СССР яҙыусыларының III пленумында ҡатнаша.

◆ 1935—1937 йылдарҙа Һәжиә Дәүләтшина — Башҡорт дәүләт педагогия институты студенты.

◆ Һәжиә Дәүләтшина 1937 йылда нахаҡҡа хөкөм ителә. 1942 йылға тиклем Мордовия АССР-ындағы Темлаг хоҡуҡ төҙәтеү-хеҙмәт лагерында тотҡонда яфа сигә.

◆ 1942 йылдан 1954 йылға тиклем Өфөлә, Бөрөлә төрлө ҡара эштәрҙә эшләй. Ул 1954 йылда Бөрө ҡалаһында вафат була. Фәҡәт 1956 йылда уны аҡлайҙар.

◆ 1942—1952 йылдарҙа Һәжиә Дәүләтшина "Ырғыҙ" романын яҙа. Роман 1957 йылда айырым китап булып баҫылып сыға. Был әҫәр шулай уҡ рус телендә баҫылып сыҡты. 1967 йылда "Ырғыҙ" романы өсөн Һәжиә Дәүләтшинаға Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелде.

# ҺӘҘИӘ ДӘҮЛӘТШИНАНЫҢ КИТАПТАРЫ

**Хикәйәләр шәлкеме.** Өфө, 1936.
**Айбика.** Повесть. Уфа, 1936; 1972.
**Ырғыҙ.** Роман. Өфө, 1957.
**Айбикә.** Повестар һәм хикәйәләр. Өфө, 1960; 1987.
**Ырғыҙ.** Роман. Өфө. 1961, 1984.
**Иргиз.** Роман. Москва, “Советский писатель”, 1961; 1984.
**Иргиз.** Роман. Алма-Ата, 1976.
**Иргиз.** Роман. Москва, 1979.

# Боҙҙа туңып ҡалҡҡан умырзаая



[illegible]

[illegible]

[illegible]



**Баймаҡ районы делегацияһы**
**Һәҙиә Дәүләтшинаның иҫтәлеген мәңгеләштереп, уның тыуған**
**яғында мәрмәр плита ҡуйҙы**